*Әҙәби мөхит*

# Йырҙарында йылдар ҡалды

Әбделмәмбәт клубында ауыл китапханасыһы Фәнүзә Әхтәмова ойоштороуында Ғаилә йылына һәм Бөйөк Еңеүҙең 73 йыллығына бағышлап, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Ғ. Сәләм исемендәге премия лауреаты Әнғәм Атнабаевтың ижадына арнап «Йырҙарында йылдар ҡалды» исемле бик матур әҙәби-музыкаль кисә үтте.

Ә. Атнабаев ижадының ҡөҙрәте, сере шунда, ул кешеләрҙең уйын, хыялын, хис-тойғоларын ябай, саф, халыҡсан итеп әйтә белә. Шуға күрә уның әҫәрҙәре тормошсан, һәр кемдең күңеленә яҡын. Шағир әҫәрҙәренең халыҡсанлығы кисә барышында яңғыраған шиғыр һәм йырҙарҙа асыҡ сағылды. Хеҙмәт ветераны Ә. Солтанова «Ромашкалар», Ғ. Ҡолмөхәмәтова «Ҡара икмәк», Н. Рысбаева «Кешегә нимә етмәй?», А. Күсәрбаева «Йылдарынан йылдар аға», З. Ҡарасбаева «Теләк», З. Боҫҡонова «Беҙ егерме һигеҙенселәр», С. Фазылйәнова «Ҡапҡа төбөндә», И. Әхтәмов «Сәскәнең үлеме» исемле шиғырҙарын һөйләп ишеттерҙе.

Шағирҙың һүҙҙәренә яҙылған халыҡсан йырҙар яңғыраны. Р. Диярова «Әсәй, һинең ҡулдар», Ғ. Ҡарамырҙина «Һағынғанда», Н. Рысбаева «Дуҫтарыңды онотма», И. Уразбахтина «Яңғыҙ миләш», А. Ҡарасбаев «Йәшлеккә ҡайтыу», М. Кәримова «Аҡҡан һыуҙар», Г. Сафина «Еҙ ҡыңғырау» йырҙарын башҡарҙы. «Һалдат йыры»на ауылыбыҙҙың һәүәҫкәр артистары Г. Сафина һәм Г. Ғайсина бейеү ҡуйҙы, ағинәйҙәр Ә. Атнабаевтың 1991 йылда яҙылған «Замана таҡмаҡтарын» ҙур оҫталыҡ менән башҡарҙы, сараны музыкаль яҡтан баянда Р. Ғайсин биҙәне.

Кисә ҡунағы мәғариф ветераны Флүрә Низамова әбделмәмбәттәрҙең ихласлығына һоҡланды, китапханаға үҙенең китабын бүләк итте. Ә инде ауылдашыбыҙ Радик Өмөтҡужин Әнғәм Атнабаев тураһындағы хәтирәләре менән уртаҡлашты. Ҡунаҡтар үҙҙәре яҙған шиғырҙарын да уҡып ишеттерҙе.

**Р. ХӘЛИЛОВА.**

Өскөн. – 2018. – 1 май. – 3 сөбит.